КУБОК ГАГАРИНА
олимпиада школьников

# 2024-2025 учебный год
# РЕСПУБЛИКАНСКИЙ ЭТАП

## БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК 8 КЛАСС

Город, район, ОУ:

Фамилия, имя:

**Персональная итоговая таблица** (заполняется учителем – членом жюри республиканского этапа)

| Задания | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | Сумма |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Количество баллов | | | | | | | | | | | |

Желаем успеха!

**1** **Бирелгән һөйләмдәрҙән тултырыусыларҙы табып, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен билдәләгеҙ.**

1) *Уның бейегәнен яратып ҡарайҙар.*
2) *Минең йырлауға һәләтем асылды.*
3) *Алтыға биште ҡушһаң, ун бер була.*
4) *Көслөнө һанап ҡараныҡ.*
5) *Беҙгә алға барырға кәрәк.*

**2** **Бирелгән һөйләмдәрҙә ниндәй тыныш билдәләре ҡуйыла? Тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ.**

*З. Биишева* (1) *Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы. Ҡояш сыҡты* (2) *донъя яҡтырып китте. Беҙ бар көс һалып тырыштыҡ* (3) *ләкин алға сыға алманыҡ.*

(1) ________
(2) ________
(3) ________

**3** **Протеза күренешенә тап килгән һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.**

○ *Бүрәнә* ○ *Арыш* ○ *Торба* ○ *Эскәмйә*

**4** **Әҫәрҙең сюжеты ниндәй элементтарҙан тора? Билдәле тәртип буйынса яҙығыҙ.**

**5** **Сюжеттан тыш элементтарға нимәләр инә?**

___

___

___

**6** **Әҫәрҙең авторҙарын билдәләгеҙ?**

| | | А | Б | В | Г |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | *Н. Мусин* | ○ | ○ | ○ | ○ |
| 2 | *Р. Өмөтбаев* | ○ | ○ | ○ | ○ |
| 3 | *Т. Ғиниәтуллин* | ○ | ○ | ○ | ○ |
| 4 | *Р. Солтангәрәев* | ○ | ○ | ○ | ○ |

А) *“Башҡорттар китте һуғышҡа”*

Б) *“Һуңғы һунар”*

В) *“Һуңғы солоҡ”*

Г) *“Әсә һәм бала”*

**7** **Ҡалын хәреф менән бирелгән исемдәрҙең килешен билдәләргә.**

1) ***Ауыл*** *эттәре лә йоҡоға талған кеүек.*
2) ***Китап*** *уҡый-уҡый йоҡлап киткәнмен.*
3) ***Әсәйемә*** *бүләк һатып алдым.*
4) *Ашағанда* ***ҡолағың*** *һелкенһен.*

___

___

___

___

**8** **Фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ.**

1) *Ут йотоу* – ___
2) *Айыу майы һөртөү* – ___
3) *Бүрәнә аша бүре күреү* – ___
4) *Бармаҡ менән һанарлыҡ* – ___
5) *Күҙе маңлайына менде* – ___

**9** **Бирелгән әҫәрҙәрҙең авторын билдәләгеҙ.**

1) *“Салауат” романы* ___
2) *“Тол ҡатындар һәм аяҡһыҙҙар бейеүе” шиғыры* ___
3) *“Ер” поэмаһы* ___
4) *“Мәктәп юлы” шиғыры* ___
5) *“Һуңғы солоҡ” романы* ___

**10 Текст буйынса бирелгән эш төрҙәрен башҡарығыҙ.**

*Һуңғы тапҡыр улы бынан биш йыл элек ҡайтҡайны. Бер үҙе генә ҡайтҡайны. Ҡартайғайны, башы ла пеләшләнгәйне. Сафия апай хәҙер һыйыр ҙа, ҡаҙ ҙа, тауыҡ та тотмай ине инде, пенсияһына ғына йәшәп ята. Утынды колхоз килтереп бирә, күршеһе Шәйхелислам ҡатыны менән бысып, ярып ҡуя. Өйө шиңде, бер яҡҡа ҡыйшайып сүкте. Улы, әсәйҙең ғүмеренә ошо йорт етер, яңыһы менән булашып тормам инде, тип уйланы, ахыры, ул турала бүтән һүҙ ҡуҙғатманы. Тағы аҙна буйы эсте һәм китер алдынан күршеһе Шәйхелисламға йөҙ һум тотторҙо: "Әсәй үлеп-маҙар китһә, ерләрһең". Шәйхелислам уның адресын һораны, теге-был булһа, телеграмма һуғырмын, тине, ҡунаҡ бер ҡағыҙ киҫәгенә адресын сыймаҡланы, әммә ҡайтырын-ҡайтмаҫын ныҡлы ғына әйтмәне.*

1) Был өҙөк ниндәй әҫәрҙән алынған? Уның авторы кем?

2) Алмаштарҙы табып, төркөмсәһен билдәләгеҙ.

3) Икенсе һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ

4) "Ғүмеренә" һүҙенә грамматик анализ яһағыҙ.

5) "Тауыҡ" һүҙендә нисә тартынҡы һәм һуҙынҡы өн бар?

6) Әҫәрҙең төп идеяһын билдәләгеҙ.

Работу выполнил участник: __________

Фамилия и имя участника *(заполняется участником собственноручно, разборчиво, прописью)*